*Тамара* ***FƏНИЕВА***

# “Мин — ни бары халҡын, йәнеләй күреп, Үлеп яратыусы бер әҙәм...”

## *Алсын-кош*

*Динара Fәйнетдиноваға*

Алсын-ҡоштан ергә алтын таммаҫ,
Алсын-ҡоштан инер тик оран.
Саңҡылдар ҙа Урал текәһенән
Нух замандан, әлме осорҙан

Иҫебеҙҙе һиҫкәндереп әйтер:
“Ҡемегеҙҙең иңе әле буш?
Ҡундырһағыҙ яурынбашығыҙға
Солғағанда ерҙе ҡаңғырыш,

Осҡор күҙем табышыр ҡиблағыҙҙы,
Ҡанаттарым ҡағыр ыу саңын.
Ҡурсаным мин төйәк-мәмләкәттең
Ҡоластарым хәтлем киң сағын.

Алсын-ҡошом — талмаҫ таянысым
Яурындарҙан биҙҙе, тимәгеҙ.
Әле лә һеҙ ҡанат аҫтарымда,
Иҫәп-хисабымда һәммәгеҙ”.

...Алсын-ҡошҡа, юҡсы, ем кәрәкмәй,
Саҡ ҡына им кәрәк.
Ҡанаты
Ҡағылыр ҙа шунан иңебеҙгә,
Ҡот индерер беҙгә, еребеҙгә,
Аяҙайтыр хаят, ҡарашты.

Ихтыяры туҙған, тиһегеҙме
Үргә тартыр оран-алсындың?
...Бер аҙ талған, әммә ҡайырылмаған
Ҡанаты ла баһа халҡымдың.

## *Бала*

Ҡарһаланма берүк, зинһар,
Туҡта!
Ем килтерер инәң. Сөңгөл күктә
Әлегә һине аямаҫтар. Иртә.
Ҡанат ныҡлыҡ зарур бейеклектә.

Ә инәңме? Һин тип айҡаша ул.
Ҡоламаҫмын тимә. Ә кем белә?..
Суҡыш игәмәй тор, өҙөлмәй тор
Бәйләнештән уның кендегенә.

...Саңҡый-саңҡый бөркөт ышыҡ өсөн
Суҡышына элеп, берәмтекләп,
Ситән кеүек итеп оя үрҙе.
Ҡаты булмаһын тип бәпкәһенә
Таш өҫтөнә ҡуйҙы һалам түшәп.

...Бөркөттөкө,
Ҡарға,
Сәпсектеке —
Бала ғәзиз,
Бала — бал инде.
Ҡанаттарың ҡайырылыр сиктә
Серәшеүҙәр ҡырҡа һеңерендә.

Бала күңеле күктә. Их... ашыға!
Тағатырға оя-диуарҙарын.
Бейек ҡаяларҙы яулағанда,
Ник уйламай бер саҡ инәһенең
Аласығын һағынып иларҙарын...

## *Анонс*

Ҡариҙелдең буйы шау ҡарағай.
Ҡошо нисәү? Урман һанамай.
Өкө шыңшый. Саҡ күҙ элгән. Иртә.
Уятырға, имеш, ярамай.

Концерт тиһәң, концерт!
Симфония!
Берсә минор, берсә мажорҙа.
Партитураһын да отам тимә,
Йә төшөрәм тимә ҡағыҙға.

Фрак кейгәс ни,
Дирижермы, тиһәң,
Ота алмаған, ахыры, нотаны,
Соло башлап ҡараны ла ҡарға,
Оялыштан микән туҡтаны.

Ораториялар, сонаталар,
Сәскәләр ҡул саба:
Браво! Бис!
Сихри концерт. Анонс! Һуңламағыҙ!
Ә башланыр мәле —
Таңғы биш.

## *Мираҫ*

Уттан ҡурҡҡан өркәк ҡолон кеүек,
Атылған уҡ кеүек керештән,
Сығып ысҡынғанда төйәгемдән
Хәйер бирҙе әней: “Имен йөрө!”
Баҡыр ғына менән көмөштән.

Сыбыртҡынан ҡурҡҡан байтал ише
(Нужа бабай иңде йыш беште)
Ышыҡ көҫәп ҡайтһам өйөбөҙгә,
Аралаусы доғаң, хатта шелтәң
Дауаланы, имең килеште.

Муйынын ҡамыт ҡырҡҡан ҡарт алаша
Ҡайтып килә. Тупһа дөм йәтим.
Нигеҙгенәбеҙ ҙә сереп бара...
Ә шул көйө шишмә,
Урман, һауа —
Затлы, әней, мираҫ-мөлкәтең.

## *Беҙ*

Күктең төркиҙәре — ҡыпсаҡтар беҙ,
Зәңгәр тиҙәр арий ҡаныбыҙ.
Шуға микән, донъя — беҙҙеке, тип,
Ҡыҙырыҡлай төпкө аңыбыҙ.

Аҡсамиттан ҡыҙҙар күлдәк кейә,
Сафьян итек, кейеҙ эшләпә.
Селтәрле шәл аша ҡараштары
Ир-егетте әллә нишләтә.

Сатырҙарҙа Сина аяҡтары,
Фарсы келәм аяҡ аҫтында.
Кенәздәрме, раджа, хандар булһын —
Үҙе яугир, үҙе тоғро ҡатын
Ҡыҙҙы һоратам тип яҫҡына.

Ынйы-мәрйен, алтын, көмөш һаҡал,
Ҡашмауыбыҙ затлы уҡанан.
Биләмәбеҙ Ерҙең бер ситенән
Икенсегә етеп туҡтаған.

“Туҡсаба” тип оран һалды ниһән,
Эркелешер ҡәүем Далаға.
Беҙҙең ирҙәр донъя кендеге тип,
Ер хужаһы тиеп һанала.

Күктең төркиҙәре — ҡыпсаҡтар беҙ,
Күк-зәңгәрҙән арий ҡаныбыҙ.
Ана шуға Йыһан илсеһе тип
Тарихтарҙа сыҡҡан даныбыҙ.

## *Ҡан*

Таш диуарлы алыҫ таш быуатта,
Усаҡ дөрләгәндә төнлөкһөҙ,
Ниндәй ҡатын буйға уҙҙы икән?
Нисә быуат, нисә заманалар
Ҡаны аға хәҙер өҙлөкһөҙ.

Нисә кендектән ул ергә тамған
Һәм һуғарған күпме тамырҙы.

Миңә насип иткән бер улаҡтан
Үҙән бәпләнем дә тере иттем
Яҙмыш инселәгән сабыйҙы.

Таш быуаттың аулаҡ диуарында
Ғашиҡ ине икән кем кемгә?
...Ник тартылам, тәү анамдай күреп,
Мейестәме, далаламы янған
Усаҡтарҙан килгән ипкенгә?

## *Һирәк-мирәк*

Ғүмерһеҙ тип бәхет кем уйлаһын,
Мәңгелек, тип инанаһың бит ул.
Ғорур инем, һинең яратыуҙан
Йәнемә ҡапты тәкәтеңдең уты.

Йәрең булған өсөн эй ғорурмын,
Түбә күктә. Күҙҙә — нур көлтәһе.
Донъя шундай камил икән дә ул,
Һуҡмаҡтарым түгел һикәлтәле.

Ысын икән. Бәхет бар икән ул,
Ҡымыҙ кеүек көндәр алҡынлана.
Йөрәк аҫҡайымда бер серем бар:
Балдан ғына татлы — ғәзиз бала.

...Ҡайҙа шулар?
Йәрем баҡыйлыҡта.
Хәҙер көндәр эңер кеүегерәк.
Донъям теүәл мәлдәр, әкиәт кеүек,
Төшкә генә инә...
Һирәк-мирәк...

## *Күңелем*

Минең күңелем энә осондамы,
Бысаҡ йөҙөндәме?
Кем белһен!
Аңлы көйө һайлап алған яҙмыш,
Етәксеһе — кәрем үҙемдең.

Минең күңелем көсәй иң текәһен,
Иң-иң осон ҡая ҡырластың.
Түбәләрҙә йәнде өҙөлөр сиктә,
Сайрар сиктә килә йырлатҡым.

Сират күпере үк булмаһа ла,
Нескә ине күп саҡ һуҡмағым.
Күңелдәшкә тиеп ғәм төйнәнем,
Ярты юлда килмәй туҡтағым.

Минең халәт — энә осондағы,
Бысаҡ йөҙөндәге күңел ул.
Үҙем һайлап алдым, берәүҙән дә
Йөкмәтелгән бурыс түгел ул.

Ай-вайына ҡуймай, илаһиәт
Хозурына һеҙҙе әйҙәһәм,
Битәрләнмәм, тиеп өмөтләнәм,
Мин — ни бары халҡын,
йәнеләй күреп,
Үлеп яратыусы бер әҙәм.

## *Бөгөн. Иртәгә*

Бөгөнгө көн никтер шәп булманы.
Бөгөн никтер юл да уңманы.
Иртәгәһен Сәмре ҡанаттары
Ҡурсаясаҡ минең донъяны.

Бөгөн никтер еле ҡаршы булды:
Ир мыжыны.
Хужа үсекте.
Әхирәттәрем дә, бушамаймы,
Береһе килеп ҡаҡһа ишекте.

Һыуға төштө балта,
Көрәк һынды.
Эйҙәрмәне һәүкәш еленен.
Күк йөҙөнөң һис бер алһыуы юҡ.
Ҡымтылған уй.
Асмай иренен.

Иртәгәһен
(Алла бирһә инде),
Бөгөн түҙҙе ниһәк,
Шәп булыр.
Илемә лә, минең донъяма ла
Бәрәкәтле ырыҫ һыйыныр.

Бөгөн, эйе, никтер эс бошмалы,
Улай булмаясаҡ иртәгә.
Бөгөнгөгә күсеп төп башына
Ултыртыптар ғына китмәһә.

...Бөгөнгөлә йәшәп булманы һис,
Иртәгәлә гелән өмөт, уй.
Ул иртәгә алыҫ икән дә ул...
Һонолаһың — ары.
Етмәй буй.

## *Өндәшмәйһең*

Өндәшмәйһең дә ул...
Һөйләшергә
Уртаҡ һүҙебеҙ ҙә юҡ һымаҡ.
Мин тәртәгә ингән йөк атылай,
Һин — тышауға күнмәҫ арғымаҡ.

Шығырлаған риҙуан ыңғайына
Һәүетемсә киләм. Юл таныш.
Һинең әле майҙан тотаһың бар...
Утлыҡсала,
Тәҡдир
Йәки мәкер
Һандалында минең туҡталыш.

Өндәшмәйһең. Эйе...
Күреп торам,
Сараһыҙҙан эстән иңрәүем
Тыштан белдермәҫкә ҡыланһам да,
Ҡарашыңа ҡабып көйрәүен.

Яңғыҙлығың. Минең яңғыҙлығым —
Яҙыҡтыр ҙа, бәлки, ғаләмдә.
Тәғәйенме китеп барған юлың?

Ҡурпылаған минең үҙәнгә
Һыуһағандан йәки асығыуҙан
Йә арыуҙан күңелең биҙгәнгә
Тарыныңмы?

Минең алйыр сиккә етеп
Наҙға сарсау хәлемде
Бер кем,
Бер кем аңламауҙы тойоп,
Сарыф итеүеңме мәлеңде?

Бәлки әле
Яңылышамдыр ғына...
Тик хайранмын һинең ҡылыҡҡа.
Өндәшмәйһең.
Ошо йәштә минме
Тотонорға тейеш ҡороҡҡа?..